Оскон
5 октябрь, 2018 йыл

# Сәсән телле ғаиләләр майҙан тотто

2018 Год семьи Ғаилә йылы



Үҙәк район китапханаһында йыл да сәсәндәр бәйгеһе үткәреү традицияға әйләнгән. Быйыл Ғаилә йылына арналған был сара «Сәсән телле, башҡорт рухлы ғаилә» исеме аҫтында үтте. Уның үҙенсәлеге шунда: конкурсҡа ғаилә командалары — дуэттар, триолар, ансамблдәр саҡырылды. Бәйгеселәр башҡарған әҫәрҙәр ғаилә ағзаларының береһе үҙе яҙған булырға тейеш тигән шарт ҡуйылды. Бөтәһе ун ғаилә ҡатнашты. Улар барыһы ла сығыштарын әҙәби-музыкаль композиция рәүешендә йөкмәткеле итеп әҙерләп килгәйне.

Бәйгелә әлектән ҡатнашҡан кешеләр менән бер рәттән яңы исемдәр асылды. Шундайҙар иҫәбендә — Гран-призы яулаусы Әбделмәмбәттән әсәле-ҡыҙлы Сәүҙә һәм Мәүлиҙә Кәримовалар. Сәүҙә апайҙың эсе тулы халыҡ ижады хазинаһы, әллә күпме мөнәжәт, нәсихәт белә, үҙенең шиғырҙары ла халыҡсан, тәрбиәүи булыуын билдәләне жюри. 1-се урынға Үтәгәндән Хәнифә Әбүбәкирова менән ейәнсәре Азалия Атанғолова лайыҡ булды. 2-се урында — Һәйетҡолдан Филүрә Моратшина һәм ҡыҙы Йәмилә, ейәнсәре Фатима Искәнйәровалар, Рауилдан әсәле-ҡыҙлы Гүзәлиә, Алтынай һәм Нурания Ғибәҙәтовалар; 3-сө урында — Ишбулдынан апайлы-ҡустылы Әдилә һәм Даян Хәлисовтар, Ҡырҙастан Бибиямал Йосопова һәм ейәнсәре Зәлиә Сәғәҙәтова, Байымдан Райхана Исламова билдәләнде. Номинациялар түбәндәгесә бирелде: «Өмөт» — Ҡушыйҙан Зөлфиә Ғибәҙәтова, «Рух» — Амангилденән Азалия Бүләкбаева менән Наҙгөл Низамова, «Халыҡ ижадына тоғролоҡ» — Гөлнара Мөхәмәткилдина һәм Зилбәр Ғайсина.

Еңеүселәр дипломдар һәм район мәҙәниәт бүлеге әҙерләгән призда р менән бүләкләнде. Командаларҙы бәйгегә әҙерләү буйынса урындағы китапханасыларға йөкмәтелгәйне. Еңеүселәрҙе әҙерләгән китапханасылар: Буранғолдан Миңзәлә Хәйруллина, Әбделмәмбәттән Фәнүзә Әхтәмова, Ҡырҙастан Резеда Баймөхәмәтова, Рауилдан Фәрүәз Шаһимәрҙәнова шулай уҡ маҡтау ҡағыҙҙары һәм бүләктәр менән билдәләнде.

Г. ИЛЬЯСОВА.